Башҡортостан Республикаһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығы
Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлауҙы иҫкәртеү (профилактик) үҙәге

# Ҡысынманы иҫкәртеү (профилактикалау) тураһында

**(халыҡ өсөн иҫкәрмә)**



Өфө 2014

**Сир Ҡысынма (scabies)** – ул ҡысынма талпаны паразиты ҡуҙғатҡан йоғошло сир.

Төнгө ҡысытыу, тән тиреһендә тура йә иһә бормалы ҡысынма юлдарының барлыҡҡа килеүе – был сир үҙенсәлектәре һанына инә.



Ябай күҙгә был талпан күренмәй, сөнки ул 0,25-0,35 мм. ҙурлығында. Ҡысынма талпаны кешелә үҫешә һәм ҡыҫҡа ваҡыт дауамында ул мендәрҙә, кейемдә, ишек тотҡаһында, урын-ер ҡаралдыһында була ала.

Ҡайһы бер ата-әсәләр ҡысынманы йорт хайуандарынан (эт, алйырҙан) йоҡторорға мөмкин тигән фекерҙә. Ләкин был фекер ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

Күбеһенсә ҡысынма сире ауырыу кеше менән аралашҡанда йоға - был сирҙе йоҡтороуҙың тура юлы. Шулай уҡ, сирле кеше менән аралашмайынса, көнкүреш әйберҙәре һәм урын-ер ҡаралдылары аша был сир йоғорға мөмкин. Был инде сирҙе йоҡтороуҙың тура булмаған юлы.

Ғаиләлә бер сирленән ҡысынманы башҡа туғандар (өлкәндәр һәм балалар) йоҡторған осраҡта тотош ҡысынма үҙәге барлыҡҡа килеүе мөмкин. Бала ни тиклем йәшерәк - шул тиклем был сирҙе йоҡтороу мөмкинлеге юғарыраҡ. Төрлө коллективта: мәктәпкәсә йәштәге балалар ойошмаһында, мәктәптә был сирҙең ҡуҙғалыуы мөмкин. Үҙәктән тыш ҡысынманы йоҡтороу осраҡтары (мунсала, поезда, ҡунаҡханала) – бик һирәк күренеш.



Ләкин ҡысынма талпаны көнкүреш әйберҙәре һәм урын-ер ҡаралдылары менән бер-бер артлы бәйләнештә булған кеше ағымы аша күсә ала.

## Ауырыу билдәләре

Ҡысынма талпандары кеше тиреһен шунда уҡ кимереп, интенсив туҡлана башлай. Инә талпандар шул ваҡытта уҡ йомортҡа һала. Инә талпан 1,5 ай йәшәй һәм ошо осорҙа ул 40-50 йомортҡа һала. Бер нисә көндән был йомортҡаларҙан ҡарышлауыҡтар барлыҡҡа килә. Улар тире өҫтөнә сығып, өлкән талпандарға әйләнә. Тире ҡатламының икенсе урындарына күсеү менән яңы цикл башлана.

Күбеһенсә, сир йоҡҡандан алып 2 аҙнанан һуң беленә. Иң беренсе һәм төп билгеһе ул – бөтөн тән тиреһе ҡысытыуы. Төнөн ҡысытыу көсәйә, сөнки был осорҙа инә талпан активлаша. Балалар йоҡлағанда тиреһен тырнайҙар, шул урынға инфекция эләгеп, эренләргә мөмкин. Балалар төнөн насар йоҡлай, иртән төшөнкө кәйефтә, мыжып уяна. Әммә был ваҡытта ҡысыу әҙәйә. Ҡайһы берҙә ҡысытыу көсһөҙ була, балалар зарланмай һәм ата-әсәләр сирле баланы күрмәй.

Ҡысынма, күбеһенсә, тиренең йоҡа йомшаҡ урындарында тарала: бармаҡ араларында, ҡул суғында, шулай уҡ эстә, арҡала, ултырышта, янбаштың эске яғында; ҡайһы ваҡыт енес ағзаһы һәм ҡаса сабыртма менән ҡаплана. Балаларҙа сабыртма аяҡ табанында, ҡултыҡ аҫтында, ултырышта таралырға мөмкин.

Ошоға оҡшаш билдәләр булһа, шунда уҡ табипҡа, иң беренсе дерматологка, мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Төҙөүсеһе: Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлауҙы иҫкәртеү (профилактик) үҙәге, Ойоштороу-методика булеге

БР ҺҺМ БМПҮ, 2014 й.